**Аңлатма яҙыу**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9-се класс**
**уҡыусылары өсөн эш программаһы.**

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы**.

**Эш программаһы** БР Мәғариф министрлығы тарафынан 2012 йылда тәҡдим ителгән, З.М.Ғәбитова төҙөгән 5-9-сы кластар өсөн башҡорт теленән программаға һәм БР Халыҡ мәғарифы министрлығы тарафынан раҫланған, В.Ш.Псәнчин менән Ю.В.Псәнчин төҙөгән 5-11-се кластар өсөн башҡорт теленән программаға. –( Ижевск, КнигоГрад), нигеҙләнеп төҙөлдө Башҡортостан Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа «1-се Стәрлебаш урта дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.
Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:

- башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;
- бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы укып аңлау күнекмәләрен биреү.
4. Үҙ фекеренде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған.

Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

Башҡорт теле – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Туған телдең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа "Башҡорт теле " предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; үҙ ҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

Уҡыу процесын ойоштороу формалары:

- Дәрес-консультация
- Практик дәрестәр
- Эшлекле уйындар
- Ярыш дәрестәре
- Компьютер дәрестәре
- Төркөмдәр менән эшләү
- Ижади дәрестәр
- Дәрес конкурстар
- Әңгәмә дәрестәре
- Дәрес уйындар
- Дәрес конференциялар
- Дәрес семинарҙар
- Интеграцияланған дәрестәр
- Предмет – ара дәрестәр
- Дәрес экскурсиялар

Башҡорт теле предметы башҡа дәрестәр менән тығыҙ бәйләнгән:

-  Донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте, бында башҡорт теле укыусыларҙы донъя халҡтарының рухи байлығына ылыҡтырыусы сара булып тора. Илһөйәр һәм башҡа халыҡтарға ҡарата толерант ҡарашлы шәхес итеп формалаштыра.
-  Рәсәй тарихы, йәмғиәтте өйрәнеү, география, бында башҡорт теле укыусыларҙы йәмғиәттең мәҙәни-тарихи тәжрибәһен аңлатыусы канал ролен башҡара.
-  Химия, физика, математика, ИКТ, информатика, бында башҡорт теле төрлө кимәлдәге белемдәрҙе һаҡлау формаһы булып тора, белемдәрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай.  Артабан юғары профессиональ кимәлде үҫтерә.
-  Хоҡуҡ, бында башҡорт теле тормошта баланың  үҙ тотошоноң этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе булып тора. Уға төрлө осраҡтарҙы мораль яҡтан дөрөҫ  баһаларға ярҙам итә.

Башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаттары һәм бурыстары:

-  Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, укығанды, радио-телетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
-  Башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп,үҙ-ара һөйләшергә, тәкдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү.
-  Дәреслектәге, укыу ҡулланмаларындағы текстарҙы, башҡорт телендә сыға торған “Йәншишмә”, “Аҡбуҙат”, “Аманат” гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы укыу күнекмәләрен биреү.
-  Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп,үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
-  Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.

Уҡыу предметына дөйөм характеристика

Коммуникатив компетенция телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын тһәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват, стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.
Тел һәм лингвистик компетенция йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә унын төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата;башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү;һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ  лингвистика тураһында тейешле белем, унын төп бүлектәренә кәрәкле  булған тел күренешен һәм факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.
Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет  һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте  дауам итеүгә һәләтле булараҡ , функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.
Функциональ грамоталыҡтың мөһим индикаторы – предмет- ара статус: коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу;телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау);танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (проблеманы асыҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай алыу, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү;библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан  кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып  уҡыу төрөн  һайлау; мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б);регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм асыҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ.б. тормошҡа ашырыу.) Функциональ грамоталыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.
Функциональ грамоталыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу  башҡорт теленең  төҙөлөшө һәм аралашыуҙың  төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәренән белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына  һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө  ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу  баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ  кимләдә булырға тейеш.

**“Башҡорт (туған) теле” предметының уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше.**

1-се Стәрлебаш урта дөйөм белем биреү мәктәбенең уҡыу планы буйынса 5-се класта башҡорт (туған) телен өйрәнеүгә бөтәһе - 68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 6-сы класта бөтәһе -68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 7-се класта бөтәһе -68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 8-се бөтәһе -68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 9-сы класта бөтәһе -66 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.);

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.**

"Башҡорт теле" предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре.

Төп мәктәп сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теленән программаһы үҙләштереүҙең **шәхси** һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең роле, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; башҡорт теленә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;
3) аралашыу прцесында кәрәкле һүҙлек запасын эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтең һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет** һөҙөмтәләре булып:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

Аудирование һәм уҡыу:

- Телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенселектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеген, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңлаған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләштереү;

• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәренеңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; башҡорт теленән башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу;
аралашыу процесында тир-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының мили-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет** һөҙөмтәләре:
1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2) гуманитар фәндәр системаһында башҡорт теленең урынын һәм мәғарифта тулыһынса унең ролен аңлау;
3) башҡорт теле тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; унең кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм унең төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәби тел;
5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәметәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәрендә ҡулланыу;
9) башҡорт теленең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

## Уҡыу предметының йөкмәткеһе.

## 5-се класс.

Башланғыс кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Фонетика һәм орфоэпия. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре,уларҙы белдергән хәрефтәр.
Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.

Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ç, з-ҙ тартынҡы ларының дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.
Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү.
Башҡорт телендә сингармонизм. Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Башҡорт телендә ижектәр. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләременән танышыу.
Башҡорт телендә баҫым, уның үҙенсәлектәре. Баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баҫымды сағыштырыу.
Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар тураһында төшөнсә биреү. Тамырға ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүен күҙәтеү, күнегеүҙәр эшләү.
Башҡорт һәм рус телендә интонация һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баҫым, пауза, фраза баҫымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баҫымы.
Башҡорт һәм рус телдәрендә интонацияның үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт телендәге ябай һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү күнекмәләре биреү.
Башҡорт теленең һүҙлек байлығы, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.
Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу күнегеүҙәре. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге ролен билдәләү. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу, тәржемә итеү, улар менән һөйләмдәр төҙөү.
Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Башҡорт теленең агглютинатив тел булыуына күнегеүҙәр. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу.
Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өҫтәлеүен практик үҙләштереү.
Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы. Практик танышыу.
Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү: тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ.
Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу.
Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр. Эш ҡағыҙҙары төрҙәренән белешмә биреү. Хат яҙырға өйрәтеү.

## 6-сы класс

.

Башҡорт телен уҡытыуҙың икенсе баҫҡысы 6-сы класта уҡытыуҙың маҡсаты – башланғыс кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе икенсе баҫҡыс талаптарына ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы,морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.

Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.

Хәүефһеҙлек, юл йөрөү ҡағиҙәләре,транспорт төрҙәре тураһында һөйләргә,өйрәтеү,уҡыу материалын тасуири,аңлы уҡыу. Рәүеш.

Рәүеш дәрәжәләре.

өрөҫ һөйләшә белеү,хат яҙыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү.Ҡылым.Ҡылым һөйкәлештәре.Хәбәр һөй-кәлеше.Хәҙерге заман.

е.Текстар уҡыу, шиғырҙар, һынамыштар ятлау, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.

. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.

Экология мәсьәләһе.Ҡылымдың теләк һөйкәлеше.

## 7-се класс.

Башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ, барлык-юҡлык формалары. Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, нindәй һөйләм киҫәге була алыуы.

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе..

Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.

Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы.

Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе.

Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.

Уртаҡ ҡылым, уның мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Рус телендәге уртаҡ ҡылымдың башҡорт теленә төрлө ҡылым формалары менән тәржемә ителеү мөмкинлектәрен миҫалдарҙа күҙәтеү. Киреһенсә, башҡорт телендәге уртаҡ ҡылым рус теленә төрлө ҡылымдар менән тәржемә ителә алыуын практик эштәр үтәлешендә асыҡлау.
Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: бирешмәҫкә тырыша, күрергә теләй һ.б.
Уртаҡ ҡылымдан һуң ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин модаль һүҙҙәре килеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.
Сифат ҡылым, унда бер үк ваҡытта сифатлыҡ һәм ҡылымлыҡ мәғәнәһенең булыуы, йәғни предметтың, заттың билдәһен уның эше, хәрәкәте буйынса белдереүе. Сифат ҡылымдың заман менән үҙгәреүе. Хәҙерге заман сифат ҡылымдың ике төрө, ябай һәм ҡушма формалары, менән практик таныштырыу, уларҙың барлыҡта йәки юҡлыҡта тора алыуы.
Үткән заман сифат ҡылым, уның яһалышы, барлыҡта, юҡлыкта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, уның яһалышы, төрҙәре, мәғәнәләре. Сифат ҡылымдарҙың исемләшеүе, был осраҡта исемдәргә хас категориялар менән үҙгәреүе. Рус теленән айырмалы рәүештә, башҡорт телендә исем алдында килеүсе сифат ҡылымдарҙың һан, эйәлек, килеш ялғауҙарнын ҡабул итмәүе.
Исем ҡылым, уның эш, хәл һәм хәрәкәттең исемен атауы, яһалышы.
Ҡылым төркөмсәләренең рус теленә тәржемә ителеү үҙенсәлектәрен практик эштәр башҡарғанда күҙәтеү, уларҙы тәржемә итеү күнекмәләрен үҫтереү.
Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау..
Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.
Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткәһен үҙләштереү. Проблемаларына, образдарына характеристика биреү. План төҙөп, план буйынса һөйләргә өйрәнеү.
Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы..
Теркәүестәр. Уларҙың һөйләм киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгө ҡулланышын күҙәтеү.
Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр.
Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Бәйләүестәр. Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Бәйләүестәрҙең килештәргә мөнәсәбәте: 1) исемдәрҙең төп килештә, ә алмаштарҙың эйәлек килештә килеүен талап итеүсе бәйләүестәр; 2) исемдәрҙең төбәү килешен талап итеүсе бәйләүестәр; 3) исемдәрҙең сығанаҡ килештә тороуын талап итеүсе бәйләүестәр.

Ымлыҡтар. Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы..Ябай һөйләм синтаксисын үҙләштереү, бер һәм ике составлы һөйләмдәрҙең үҙенсәлектәрен үҙләштереү.

**8-се класс.**

Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Ҡушма һөйләм синтаксисы һәм пунктуация. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә. Ябай һөйләмдәрҙән айырмалы уларҙың кәмендә ике ябай һөйләмдән тороуы. Ҡушма һөйләм составындағы ябай һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеү юлдары һәм саралары. Уҡылған әҫәрҙәрҙән ябай һәм ҡушма һөйләмдәргә килтерергә. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә. Улар составындағы ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара теҙеү юлы менән бәйләнеүе, теркәүесле һәм теркәүесһеҙ бәйләнеш. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Улар эргәһендәге тыныш билдәләре. Теҙмә ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәрҙе бәйләүсе теркәүестәр.Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, улар тураһында төшөнсә. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙәге баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең мәғәнә һәм төҙөлөшө яғынан бүленеше.
Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, бәйләнеү юлдары. Баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙең урынлашыу тәртибе, улар араһында тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең үҙ-ара синонимлығы һәм вариантлылығы. Уҡылған әҙәби әҫәрҙәрҙән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәргә миҫалдар килтереү.

Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр, уларҙағы тыныш билдәләре. Алда уҡылған әҫәрҙәрҙән теҙмә ҡушма һөйләмдәргә миҫалдар табып, уларға синтаксик анализ эшләү. Эйәрсән һөйләмдәрҙең мәғәнә яғынан бүленеше. Эйәрсән һөйләмдең төрөн баш һөйләмдән сығып бирелгән һорау ярҙамымда билдәләү. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙҙе асыҡлаһа, уның мәғәнәһен мөнәсәбәтле һүҙҙең ниндәй һөйләм киҫәге булыуҙан сығып билдәләү. Әҙәби әҫәрҙәрҙән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәргә миҫалдар килтереү. Эйәрсән эйә һөйләм, уның баш һөйләмдең эйәһе урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән эйәне асыҡлауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар табыу.

Эйәрсән хәбәр һөйләм, уның баш һөйләмдең хәбәре урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән хәбәргә ҡарауы, уларҙы баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышын уҡылған әҙәби әҫәрҙәрҙән алынған миҫалдарҙа күрһәтеү. Эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәр, уларҙың баш һөйләмдең аныҡлаусы урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән аныҡлаусыға ҡарауы, уларҙың баш һөй-ләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышын укылған әҙәби әҫәрҙәрҙә күҙәтеү. Башҡорт телендәге эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән тултырыусы һөйләм, уның баш һөйләмдең тултырыусыһы урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән тултырыусыға ҡарауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышын әҙәби әҫәрҙәрҙән алынған миҫалдар нигеҙендә аңлатыу. Башҡорт телендәге эйәрсән тултырыусы һөйләмдәрҙең рус теленә тәржемә ителеү мөмкинселектәре.

Эйәрсән хәл һөйләмдәр, уларҙың төрҙәре һәм эйәрсән киҫәк хәлдәрҙең һорауҙарына яуап булыуы. Улар араһында тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән ваҡыт һөйләм, уның баш һөйләмдең ваҡыт хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән ваҡыт хәлен асыҡлаусы. Ваҡыт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән урын һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән урын хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге урын хәле урынында килеүе. Урын һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышын әҙәби әҫәрҙәрҙән алынған миҫалдарҙа күрһәтеү. Башҡорт телендәге урын һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү. Эйәрсән рәүеш һөйләмдәр, улар баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән рәүеш хәлен асыҡлайҙар, йә баш һөйләмдең рәүеш хәле урынында киләләр. Эйәрсән рәүеш һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән сәбәп һөйләм, уның баш һөйләмдең сәбәй хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәт һүҙе менән бирелгән сәбәп хәлен асыҡлауы. Эйәрсән сәбәп һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән маҡсат һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән маҡсат хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге маҡсат хәле урынында килеүе. Эйәрсән маҡсат һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышын уҡылған әҫәрҙәрҙән табыу, уларға анализ яһау. Башҡорт телендәге эйәрсән маҡсат һөйләмдәрҙең рус теленә тәржемә ителеү мөмкинселектәре. Эйәрсән шарт һөйләм, уның баш һөйләмдәге шарт хәл урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән күләм-дәрәжә хәленә ҡарауы. Эйәрсән шарт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән кире һөйләм, уның баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән кире хәлгә ҡарауы, йә баш һөйләмдәге кире хәл урынында килеүе. Эйәрсән кире һөйләмде баш һөй- ләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышын укылған әҙәби әҙәрҙәргә нигеҙләнеп аңлатыу. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Уларҙың икенән артыҡ ябай Һөйләмдәрҙән тороуы. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙең төрҙәре.

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә: тиң эйәрсән һөйләмле һәм тиң булмаған эйәрсән һөйләмле күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙағы тыныш билдәләре. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләргә уҡылған әҫәрҙәрҙән миҫалдартабыу.
Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә, улар составындағы ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара теҙмә юл менән дә, эйәртеүле юл менән дә бәйләнеүе, тыныш билдәләренең ҡуйылышын әҫәҙәрҙән алынған миҫалдарҙа күрһәтеү. Теҙемдәр, уларҙың йә тиң киҫәктәре, йә тиң һөйләмдәре күп булыуы һөҙөмтәһендә ҡатмарландырылған ябай йәки ҡушма һөйләм булыуы. Теҙемдәрҙең төрө, төҙөлөшө, уларҙың структураһында һанау һәм йомғаҡлау бүлеген барлыҡҡа килтереүсе конструкцияларҙың булыуы. Һанау һәм йомғаҡлау бүлегенең ҡайҙа

килеүенә ҡарап, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Теҙемдәргә ҡобайырҙарҙан миҫалдар табыу. Тыныш билдәләре, улар тураһында дөйөм төшөнсә. Тыныш билдәләрен төркөмләү. Һөйләм төҙөлөшө, мәғәнәһе, интонация һәм тыныш билдәләре ҡуйылышы.
Һөйләм аҙағындағы тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәләренең ҡуйылыу осраҡтары.
Өтөр һәм уның ҡуйылыу осраҡтары: ябай һөйләмдәрҙә һәм ҡушма һөйләмдәрҙә өтөрҙәрҙең ҡуйылышы.Һыҙыҡ, уның ҡуйылыу осраҡтары: ябай һөйләмдәрҙә һәм ҡушма һөйләмдәрҙә һыҙыҡтың ҡуйылышы. Тыныш билдәләрең ҡуйылышын уҡылған әҫәрҙәрҙән алынған миҫалдарҙа күрһәтеү. Нөктәле өтөр, уның ябай һөйләмдәрҙә һәм ҡушма һөйләмдәрҙә ҡуйылыу осраҡтары.
Ике нөктәнең ҡуйылыу осраҡтары: ябай һөйләмдәрҙә, ҡушма һөйләмдәрҙә, тура телмәрле һөйләмдәрҙә ике нөктәнең ҡуйылышы.
Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**9-сы класс.**

Тел тураһында дөйөм төшөнсә
Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш,Башҡорт теле – башҡорт халҡының м.т.
Әҙәби тел һәм диалек.тБашҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше.Ике теллелек
Стилистика. Йәнле һөләү стиле.Матур әҙәбиәт стиле.Фәнни стиль.Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле.Публицистик стиль.Хаттар стиле
Һүрәтләү саралары.Лексик һәм грамматик синонимдар.Антитеза
Һүҙҙе һәм уның форм. телм.Графика. Ғәрәп графикаһы.Орфография. Орфоэпия.
Башҡорт теленең лексик ҡатламдары.Орфография. Өндәрҙең сиратланыуы
Ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.Ялғау ҡушҡанда һүрәтләнеүсе күренештәр
Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышы.Ҡушма һүззәрҙең дөрөҫ әйтелеше.Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы
Яңғыҙлыҡ исемдәренең дөрөҫ яҙылышы.Үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушыу.
Морфология. Һүҙ төркөмдәренең системаһы.Һүҙҙең грамматик мәғәнәһе
Эйәлек заты, хәбәрлек заты категориялары.Ҡылым. Уның төрҙәре.Һөйкәлеш, зат, заман категориялары.
Алмаштарҙың һөйләмдә роле.Сифат һәм рәүеш.Редакторлау күнекмәләре.
Исем.Ҡылым.Телмәр мәҙәниәте. Аралашыу ҡағиҙәләре.Өндәшеү әҙәплелеге.Иҫәнләшеү әҙәплелеге.Аралашыуҙың тотороҡло формаларыДиалог төҙөү
Синтаксис һәм пунктуация.Ябай һөйләм.Ҡушма һөйләм.Ҡушма һөйләм төрҙәре.Ҡатмарлы синтаксис конструкциялар. Уларҙа тыныш билдәләре

**Календарь тематик планлаштырыу**
**5-се класс.**

| | Темалар | Дәрестең йөкмәткеһе | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|
| 1 | Тел – аралашыуҙың иң мөһим сараһы. | Телмәр мәҙәниәтенең, кеше тормошонда аралаша белеүҙең ролен аңлау; | һөйләү һәм яҙма телмәрҙең төп үҙенсәлектәрен белеү. |
| 2 | Ҡабатлау. Һүҙ киҫәктәре. Исем. | Исемдәрҙең грамматик билдәләрен ҡабатлау. | . Текстан исемдәрҙе та¬быу һәм уларға морфологик анализ яһау |
| 3 | Сифат. Һан. Ҡылым. | Сифат,һан, ҡылымдарҙың грамматик билдәләрен ҡабатлау. | Текстан сифаттарҙы һандарҙы, ҡылымдарҙың та¬быу һәм уларға морфологик анализ яһау. |
| **4** | **Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте.** Һүҙбәйләнеш. | Күҙәтеүҙәр ярҙамында эйәгә бәйләнгән һүҙҙәрҙең эйә алдында, хәбәргә бәйләнгән һүҙҙәрҙең хәбәр алдында килеүе тураһында һығымта яһау. | Һөйләмдәрҙе һүҙбәй¬ләнештәргә тарҡатыу. Күсмә мәғәнәле һүҙбәйләнештәрҙең мәғә¬нәһен аңлатыу, уларҙың телмәрҙә ҡулланылыуын күҙәтеү. |
| 5 | Һүҙбәйләнеш. | Күҙәтеүҙәр ярҙамында эйәгә бәйләнгән һүҙҙәрҙең эйә алдында, хәбәргә бәйләнгән һүҙҙәрҙең хәбәр алдында килеүе тураһында һығымта яһау. | Һөйләмдәрҙе һүҙбәй¬ләнештәргә тарҡатыу. Күсмә мәғәнәле һүҙбәйләнештәрҙең мәғә¬нәһен аңлатыу, уларҙың телмәрҙә 6ҡулланылыуын күҙәтеү. |
| 6 | Һөйләм. | Һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. | Һ7өйләмгә тулы синтаксик анализ яһау. Һөй¬ләм киҫәктәрен билдәләү. |
| 7 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | Әйтелеү маҡсаты йәки интонация яғынан һөйләмдәрҙе айыра белеү, | дөрөҫ тауыш менән һөйләмдәрҙе уҡырға өйрәнеү. |
| 8 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. | Баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе табыу һәм билдәләү. | Эйәгә бәйләнгән, хәбәргә эйәргән эйәрсән киҫәктәрҙе табыу һәм билдәләргә өйрәнеү |
| 9 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. | Эйәрсән киҫәктәрҙе табыу һәм билдәләү. Эйәгә бәйләнгән эйәрсән киҫәктәрҙе табыу һәм билдәләргә өйрәнеү. | . Эйәгә бәйләнгән эйәрсән киҫәктәрҙе табыу һәм билдәләргә өйрәнеү. |
| 10 | Тултырыусы. | Тултырыусы һөйләмдең ниндәй киҫәген асыҡлауын һәм ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүен билдәләргә өйрәнеү. | Тултырыусы һөйләмдең ниндәй киҫәген асыҡлауын һәм ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүен билдәләргә өйрәнеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 11 | Хәлдәр. | Хәлдәрҙең  һөйләмдең ниндәй киҫәген асыҡлауын һәм ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүен билдәләргә өйрәнеү. | . Хәлдәр һәм уларҙың төрҙәрен асыҡлау |
| 12 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | Һөйләмдең тиң киҫәктәре тураһында белемде системалаштырыу һәм тәрәнәйтеү. | Темаға ҡағылышлы лек¬сиканы үҙләштереү; |
| 13 | Текст. | Тексттың композицияһын үҙләштереү, телмәрҙә йөкмәтке эҙмә-эҙлелегенә эйә булыу. | Тексттың композицияһын үҙләштереү, телмәрҙә йөкмәтке эҙмә-эҙлелегенә эйә булыу. |
| 14 | Өндәш һүҙҙәр. | Өндәш һүҙ янында тыныш билдәләренең ҡуйылыш тәртибен төшөнөү; | шиғри әҫәрҙе, өндәш һүҙле һөйләмдәрҙе, хаттарҙы тасуири итеп уҡырға өйрәнеү. |
| 15 | Ҡушма һөйләм | Ҡушма һөйләмдәр тураһында белемде системалаштырыу һәм тәрәнәйтеү. | Ҡушма һөйләмдәр тураһында белемде системалаштырыу һәм тәрәнәйтеү. |
| 16 | Тура телмәр. | Тура телмәр тураһында белемде системалаштырыу һәм тәрәнәйтеү. | Тура телмәрле һөйләмдәрҙе һәм диалогтарҙа репликаларҙы дөрөҫ тауыш менән уҡырға өйрәнеү. |
| 17 | Контроль диктант. “Ҡош юлы”. | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. | |
| 18 | Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Изложение. “Әсә йыры”. | Изложение һәм инша яҙыу өсөн материал йыйырға өйрәтеү | . Текст төҙөлөшө, уның өлөштәре тураһында белем биреү. Тәҡдим ителгән һүҙҙәр ярҙамында текстар төҙөү. |
| **19** | **Фонетика һәм графика. Орфография. Телмәр мәҙәниәте.** Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. | Һуҙынҡы һәм тартынҡыларҙы дөрөҫ яҙыу. Һүҙҙәргә фонетик анализ яһау. | Һөйләмде ҙур хәреф менән яҙыу. Һөйләм аҙағында те¬йешле тыныш билдәһен ҡуйыу. |
| 20 | Өн һәм хәреф. Алфавит. | Башҡорт теленең алфавитын иҫкә төшөрөү. Үҙенсәлекле өн-хәрефтәрҙе ҡабатлау, белемдәрен тәрәнәйтеү, күнегеүҙәрҙән һүҙҙәр табыу, миҫалдар килтереү. | Бирелгән һүҙҙәрҙе алфавит тәртибендә яҙыу. Я, ю хәрефтәренең яҙылыу ҡағиҙәһе һәм нәҙек һүҙҙәрҙә улар урынына йә, йү хәреф-бәйләнештәренең килеүе тураһында. Бер төрлө тартынҡыларҙың йәнәш яҙылыу осрағына аңлатма биреү. |
| 21 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы. | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. Фонетик анализ | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | О.Ө,Ы, Е | яһай белергә. | Фонетик анализ яһай белергә. |
| 22 | Контроль диктант. “Тәбиғәт биҙәктәре”. | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. |
| 23 | Ижек уларҙың төрҙәре. | Ижек, уларҙың төрҙәрен билдәләргә өйрәнеү. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. | Ижек, уларҙың төрҙәрен билдәләргә өйрәнеү. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. |
| 24 | Баҫым. | Баҫымдарҙы дөрөҫ ҡуя белеү, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү. | Баҫымдарҙы дөрөҫ ҡуя белеү, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү. |
| 25 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. | Һуҙынҡыларҙың әйтелешен тыңлау, сағыштырыу, һығымта яһау, дөрөҫ яҙыу. | Һүҙҙәрҙең моделен төҙөү. Һүҙҙәргә дөрөҫ ялғау ҡушыу. . Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең төп законға буйһонмауын күҙәтеү. |
| 26 | Тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. | Тартынҡыларҙың әйтелешен тыңлау, сағыштырыу, һығымта яһау, дөрөҫ яҙыу. Һүҙҙәрҙең моделен төҙөү. Һүҙҙәргә дөрөҫ ялғау ҡушыу. | Тамырҙаш һүҙҙәр менән таны¬шыу. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең төп законға буйһонмауын күҙәтеү. |
| 27 | Өндәрҙең оҡшашыуы. | Өндәрҙе таный һәм анализлай белеү. | Өндәрҙе таный һәм анализлай белеү. |
| 28 | Телмәр үҫтереү. “Мәргән”. | Изложение һәм инша яҙыу өсөн материал йыйырға өйрәтеү. Текст төҙөлөшө, уның өлөштәре тураһында белем биреү. Тәҡдим ителгән һүҙҙәр ярҙамында текстар төҙөү. | . Текст төҙөлөшө, уның өлөштәре тураһында белем биреү. Тәҡдим ителгән һүҙҙәр ярҙамында текстар төҙөү. |
| 29 | Контроль диктант. “Кояш”. | Иғтибар менән тыңлау, белемдәрҙе ғәмәлдә ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. | Иғтибар менән тыңлау, белемдәрҙе ғәмәлдә ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә |
